# ҠОРБАН ҒӘЙЕТЕ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН

**Бисмилләһир-рахмәнир-рахим!**
**Хөрмәтле мосолман ҡәрҙәштәр!**
**Әс-сәләмү-ғәләйкүм үәрахмәтул-лаһи үә бәрәкәтүһ!**

Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты һәм уның мәхәлләләре исеменән һеҙҙе Ислам донъяһының иң оло байрамы - Ҡорбан ғәйете менән ысын күңелдән ҡотлайым! Аллаһы Тәғәлә изге Ҡөрьән Кәримдә: "Раббыңдың ризалығы өсөн намаҙ уҡы һәм ҡорбан сал", - тип бойора. Ислам дине - мәрхәмәтлелек дине. Ибраһим, ғәләйһис-сәләм, һәм уның улы Исмәғилгә, ғәләйһис-сәләм, Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән һынауҙың нигеҙе лә бына шул мәғәнәлә. Шуға күрә беҙ тыныслыҡҡа, татыулыҡҡа, үҙ-ара күркәм мөғәмәләгә, милләт-ара татыулыҡҡа саҡырабыҙ. Бөгөн изге хаж ерҙәрендә, ер йөҙөнөң бөтә мәсеттәрендә изге ғибәҙәт үтәлә һәм ҡорбандар салына. Төрлө-төрлө милләт вәкилдәренән булған мосолмандар Исламдың бишенсе тереге - хаж ғибәҙәтен үтәй.

Ҡорбан ғәйете беҙҙе күңел сафлығына, милләт-ара татыулыҡҡа, ер йөҙөндә Аллаһы Тәғәләнең генә бәндәһе булып йәшәргә, насар ғәҙәттәрҙән арынырға, хеҙмәткә, ғибәҙәткә, ата-әсәләрҙе хөрмәт итергә, етем һәм фәҡирҙәргә ярҙам күрһәтергә, рәхимле үә шәфҡәтле булырға өйрәтә.

Ошо изге Ҡорбан байрамында Аллаһы Тәғәлә барыбыҙға ла ғаилә бәхете, ил-көн тыныслығы, үҙ-ара тыныслыҡ, һаулыҡ, сәләмәтлек, рухи яңырыу, ижад һәм хеҙмәт уңыштары, тыуған Башҡортостаныбыҙға хәйерле бәрәкәттәр насип итһен.

Ҡорбан ғәйете мөбәрәк булһын!

**Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе, мөфтөй Нурмөхәммәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН.**

## ҒӘЙЕТ ҠОРБАН

*Шәйехзада Бабич*

*Һөйөнөгөҙ, дуҫҡайҙарым! Байрам бөгөн, Ҡорбан бөгөн;*
*Һәр мосолман ҡәлбенә байрам ҡошо ҡунған бөгөн.*
*Һайрай ул ҡош: "Аллаһу әкбәр, Аллаһу әкбәр!" - тип ҡуя,*
*"Һөй, мосолман, байрамыңды, Аллаһ яҡлар!" - тип ҡуя.*
*Һөй, һөйөн, йырлап ебәр, ырғыт бөтә зар-моңдарың,*
*Аллаһ һаҡлар, һаҡлап уҙҙырһаң был байрам көндәрен.*
*Аллаһ маҡтар, маҡтаһаң был байрамды, бик йәмле тиһәң,*
*Аллаһу әкбәр, Аллаһу әкбәр, үә лил-ләһил-хәмд тиһәң,*
*Кил, туғандар, бер туған күк берләшеп сайран итик,*
*Ҡайғы-хәсрәттәр таралһын, гөрләшеп байрам итик...*
*Кил, мосолман, бир ҡулыңды, бир ҡыҫайым шат йән менән,*
*Ас иманлы йөҙкәйең, ҡотлап үбәйем Байрам менән!..*

## Өфөлә намаҙ ваҡыты

**Зөлхизә — 29 көн 2009 миләди йыл**
**1430 һижри йыл.**

| Зөлхизә | Аҙна көндәре | Ноябрь Декабрь | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә нам. | Икен. нам. | Аҡшам. намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Шаршамбы | 18 | 07.23 | 08.53 | 13.30 | 15.39 | 17.09 | 18.39 |
| 2 | Кесе йома | 19 | 07.25 | 08.55 | 13.30 | 15.38 | 17.08 | 18.38 |
| 3 | Йома | 20 | 07.27 | 08.57 | 13.30 | 15.37 | 17.07 | 18.37 |
| 4 | Шәмбе | 21 | 07.29 | 08.59 | 13.30 | 15.35 | 17.05 | 18.35 |
| 5 | Йәкшәмбе | 22 | 07.30 | 09.00 | 13.30 | 15.34 | 17.04 | 18.34 |
| 6 | Дүшәмбе | 23 | 07.32 | 09.02 | 13.30 | 15.33 | 17.03 | 18.33 |
| 7 | Шишәмбе | 24 | 07.34 | 09.04 | 13.30 | 15.31 | 17.01 | 18.31 |
| 8 | Шаршамбы | 25 | 07.36 | 09.06 | 13.30 | 15.30 | 17.00 | 18.30 |
| 9 | Кесе йома | 26 | 07.38 | 09.08 | 13.30 | 15.29 | 16.59 | 18.29 |
| 10 | Йома | 27 | 07.39 | 09.09 | 13.30 | 15.28 | 15.58 | 18.28 |
| 11 | Шәмбе | 28 | 07.41 | 09.11 | 13.30 | 15.27 | 16.57 | 18.27 |
| 12 | Йәкшәмбе | 29 | 07.43 | 09.13 | 13.30 | 15.26 | 15.56 | 18.26 |
| 13 | Дүшәмбе | 30 | 07.44 | 09.14 | 13.30 | 15.25 | 16.55 | 18.25 |
| 14 | Шишәмбе | 1 | 07.46 | 09.16 | 13.30 | 15.24 | 15.54 | 18.24 |
| 15 | Шаршамбы | 2 | 07.47 | 09.17 | 13.30 | 15.23 | 16.53 | 18.23 |
| 16 | Кесе йома | 3 | 07.49 | 09.19 | 13.30 | 15.23 | 16.53 | 18.23 |
| 17 | Йома | 4 | 07.50 | 09.20 | 13.30 | 15.22 | 15.52 | 18.22 |
| 18 | Шәмбе | 5 | 07.52 | 09.22 | 13.30 | 15.22 | 16.52 | 18.22 |
| 19 | Йәкшәмбе | 6 | 07.53 | 09.23 | 13.30 | 15.21 | 16.51 | 18.21 |
| 20 | Дүшәмбе | 7 | 07.55 | 09.25 | 13.30 | 15.21 | 16.51 | 18.21 |
| 21 | Шишәмбе | 8 | 07.56 | 09.26 | 13.30 | 15.20 | 16.50 | 18.20 |
| 22 | Шаршамбы | 9 | 07.57 | 09.27 | 13.30 | 15.20 | 16.50 | 18.20 |
| 23 | Кесе йома | 10 | 07.58 | 09.28 | 13.30 | 15.20 | 16.50 | 18.20 |
| 24 | Йома | 11 | 08.00 | 09.30 | 13.30 | 15.19 | 16.49 | 18.19 |
| 25 | Шәмбе | 12 | 08.01 | 09.31 | 13.30 | 15.19 | 16.49 | 18.19 |
| 26 | Йәкшәмбе | 13 | 08.02 | 09.32 | 13.30 | 15.19 | 16.49 | 18.19 |
| 27 | Дүшәмбе | 14 | 08.03 | 09.33 | 13.30 | 15.19 | 16.49 | 18.19 |
| 28 | Шишәмбе | 15 | 08.04 | 09.34 | 13.30 | 15.19 | 16.49 | 18.19 |
| 29 | Шаршамбы | 16 | 08.05 | 09.35 | 13.30 | 15.19 | 16.49 | 18.19 |

# Йәнә бер иман йорто асылды

## Һигеҙ тиҫтә йылдан һуң Үзбәк ауылы халҡы мәсетле булды

Фәрғәт ҒӘЛИН.

**Ғафури районының Үзбәк ауылында ғүмергә иҫтә ҡалырлыҡ тарихи ваҡиға - мәсет асыу тантанаһы булды. Көндөң матурлығы байрамса кейенеп килгән кешеләрҙең шат йөҙҙәре, эргәлә балҡып, ауылға йәм биреп, нур һибеп ултырған мәсет күңелдәрҙә яҡты хистәр уята. Был мәсетте Өфөлә йәшәүсе ауылдашыбыҙ, эшҡыуар Дамир Тимербәк улы Шәрипов төҙөттө.**



- Мәсет һалыу уйы 2005 йылда уҡ тыуғайны, 2006 йылда ғына ниәттәремде тормошҡа ашыра башланым, - ти Дамир Тимербәк улы. Теүәл өс йыл элек мәсет һалынасаҡ урын билдәләнде һәм унда Ҡөрьән уҡылды. 27 сентябрҙә ауыл халҡы менән берлектә иман йортона нигеҙ һалынды. Мәсет төҙөүҙә йәмғеһе һигеҙ милләт кешеһе (барыһы ла мосолмандар) ҡатнашты. Хеҙмәттәре өсөн эш хаҡын Дамир Тимербәк улы түләһә, төҙөүселәрҙе ашатып-эсереү, тәрбиәләү уның әсәһе Фәүзиә Кашбулла ҡыҙы һәм энеһе Ванирҙың ҡатыны Зөлфиә иңенә төштө.

Ағаһы Сәхиулла, энеһе Ванир, һеңлеһе Рима менән кейәүе Ирек тә Дамирҙың иң ышаныслы ярҙамсылары булып төҙөлөштөң башынан аҙағынаса ҡатнашты.

- Мәсет төҙөргә ниәтләнгәс, иң тәүҙә ғаиләм - ҡатыным Лилиә Ғәзимйән ҡыҙы һәм ҡыҙҙарым Диана, Регина менән кәңәшләштем. Улар ҡаршы төшмәне. Әсәйҙең фатихаһын алғас, туғандар риза булғас, дәртләнеп эшкә тотондом. Әлбиттә, тормошта төрлө кешеләр осрай. Изге юлда аяҡ салырға теләүселәр ҙә булды. "Тыныс ҡына йәшәп булмай инеме ни, ниңә быңдай ауыр эшкә тотондоң?" - тип әйтеүселәр ҙә табылды. Ундайҙарға: "Беҙҙең быуын элек-электән иманлы, динле булған, миндә уларҙың ҡаны бар", - тип яуаплаған Дамир. Ысынлап та, олатаһы Сәфиулла, уның атаһы Хәйрулла, уның атаһы Шәриф дингә бик бирелгән кешеләр булған. Утыҙынсы йылдарҙа мәсет манараһын ауҙарыуға ҡаршы сыҡҡаны өсөн Хәйрулла олатаһы бер нисә йыл төрмәлә ултырып сыға хатта. 1840 йылдарҙа ауылда төҙөлгән мәсет эшмәкәрлегендә лә Шәриповтар туранан-тура ҡатнаша. Шуға ла Дамир Шәриповтың ауылда мәсет төҙөтөүенә һис ғәжәп-ләнәһе түгел.

Яңы мәсетте асыу тантанаһына Үзбәк ауылы халҡы шатлығын уртаҡлашырға тирә-яҡ ауылдарҙан, күрше райондарҙан, ҡалаларҙан ҡунаҡтар килде. Тантана Башҡортостан Диниә назараты сәркәтибе Әбделсамат хәҙрәт Ваһаповтың Ҡөрьән уҡыуы менән башланып китте.

Тантананы алып барыусы ауылдашыбыҙ, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәт-кәре Рәмил Ғимрани ҡунаҡтарға һүҙ бирҙе: Әбделсамат хәҙрәт, Красноусол мәсете имамы Таһир хәҙрәт Үзбәков, Ауырғазы районы имамы Ришат хәҙрәт, Еҙем-Ҡаран мәсетенән Баян хәҙрәт Хәсәнов, Юлыҡ һәм Һабай мәсеттәре имамдары Салауат Юлыҡов һәм Фәнил Басиров хәҙрәттәр, район хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлнур Барый ҡыҙы Сәфәрғолова фәһемле һүҙҙәр әйтте, изге теләктәр теләне.

- Мәсетегеҙ бик матур, күркәм. Тик ул буш тормаһын, ишектәре һәр ваҡыт асыҡ булып, унан кеше өҙөлмәһен. Бөтә ауылға иман нуры таратып, әҙәпкә, тәртипкә өндәп торһон, - тине улар.

- Туғай ауылы халҡына эйәреп Үзбәк ауылын да "айыҡ ауыл" тип иғлан итеү тураһында уйлаша башлаһағыҙ ине, - тип үзбәктәргә мөрәжәғәт итте Гөлнур Сәфәрғолова. Был тәҡдимде халыҡ көслө алҡышлап ҡаршы алды. Тимәк, был - бик мөһим һәм күптән күтәрелергә тейешле тәҡдим. Еҙем-Ҡаран ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Айҙар Ғәйнуллин, "Ағиҙел" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте етәксеһе Тимерйән Кинйәбаев, Красноусолдан Ғәлинур Ғәлин, Архангелдән Ғәлимйән Ғәлин дә сығыш яһап, ауылдаштарына матур теләктәрен еткерҙе.

Хәмзә Искәндәр улы Ғәләмовтың (Хәмзә Хажи), Дамирға ауылдың почетлы гражданы исемен биреү кәрәк, тигән фекере менән дә килеште халыҡ. Балаларҙың сығышы ла күңелдәргә хуш килде.

- Иң оҡшағаны сарала балаларҙың ҡатнашыуы, уларҙың сығышы булды, - ти Дамир Тимербәк улы.

Байрамда БДУ профессоры, юридик колледж директоры Әхтәр Боҫҡонов та ҡатнашты, Еҙем-Ҡаран ауылынан Тимербикә Шәрипова ла тантанаға килеүселәрҙе иҫтәлекле ваҡиға менән тәбрикләне, мәсеткә бүләк тапшырҙы. Һәм бына иң тулҡынландырғыс мәл: йәшел таҫма киҫелеп, дин әһелдәре, ҡунаҡтар эскә үтте.

Мәсет урамына өҫтәлдәр ултыртылып, ауыл халҡы бешереп килтергән ризыҡ ҡуйылды, сәй ҡайнатылды, былау, аш бешерелде. Күмәкләшеп намаҙ уҡығандан һуң, өр-яңы мәсеттә тәүге тапҡыр исем ҡушыу йолаһы үткәрелде. Андрей менән Лилиәнең сабыйына Әҙилә Әһел ҡыҙы тип исем ҡушылды. Әйткәндәй, урыҫ милләтле Андрей үҙе лә ислам динен ҡабул итте, ҡыҙына мәсеттә исем ҡуштырыуға ла ихлас риза булды.

Яңы мәсеттә, балаларының һәм яҡын кешеләренең һорауы буйынса, элекке колхоз рәйесе мәрхүм Фәнил Кәримов рухына бағышлап Ҡөрьән уҡылды. Һуңынан байрам ауыл мәҙәниәт йортонда дауам итте. Район мәҙәниәт һарайы хеҙмәткәрҙәре Рәмил Ғимрани, Ильмира Иҫәнғәлина, Хызыр Нәзиров, Еҙем-Ҡарандан Гүзәл һәм Динислам Шафиҡовтар, Рита Мөрәсова, Рәүилә Килмөхәмәтова, Илфат Хажиев, Тәнзилә Искәндәрова, шулай уҡ Үзбәк мәктәбе уҡыусыларының дәртле бейеүҙәре, моңло йырҙары барыһына ла оҡшаны. Ғөмүмән, мәсет асыу барыһы өсөн дә, бигерәк тә йәштәр һәм балалар өсөн, ғүмергә иҫтә ҡалырлыҡ тарихи көн булды. Күңелдәргә иман нуры инеп, уйҙар яҡтырып киткәндәй тойолдо. Шулай итеп, һигеҙ тиҫтәгә яҡын йылдан һуң Үзбәк ауылы халҡы яңынан мәсетле булды.

# Хәҙис Шәрифтәр

*Аллаһы Тәғәлә бер әмиргә игелек теләһә, онотҡанын уның иҫенә төшөрә, йәки хәтеренә төшөрөргә ярҙам итә торған тоғролоҡло вәзир бирә, әгәр изгелек теләмәһә, онотҡанын иҫенә төшөрмәй, иҫкә төшөрөргә лә ярҙам итмәй торған вәзир бирә.*

* * *

*Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында иң хөрмәтле йорт - етемдәрҙе хөрмәт иткән йорт.*

* * *

*Әнәс Ибн Малик риүәйәт итеп ҡалдырған бер хәҙистә әйтелә: "Сәхәбәләренән булған берәү үлеп ҡалғас, икенсеһе: "Бына хәҙер уға йәннәт тураһында хәбәр бирелер инде", - тигәс, пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм: "Быны бит һин белмәйһең. Бәлки, был кеше иҫән ваҡытта үҙенә ҡағылмаған нәмәләр тураһында һөйләп йөрөгәндер..." - тигән.*

* * *

*Дуҫтарҙың хәйерлеһе шундай була: Аллаһы Тәғәләне зекер итһәң, ул һиңә ярҙам итә, Аллаһы Тәғәләне онотһаң, хәтереңә төшөрә.*

* * *

*Изгелек бер ҡасан да иҫкермәҫ; гонаһ бер ҡасан да онотолмаҫ; хаҡ менән ялғанды айырып биреүсе Аллаһ бер ҡасан да үлмәҫ. Теләгәнеңде эшлә: нимә эшләһәң, шуға тейешле булған яҙаһын күрерһең.*

* * *

*Холҡо яҡшы булған мосолман - иман йәһәтенән иң мөкәммәл мосолмандыр.*

* * *

*Сәхәбәләрҙән береһе Мөхәммәдтән, ғәләйһис-сәләм, һораны: "Әй, Аллаһы Тәғәләнең илсеһе, миңә Ислам динендә бер һүҙ әйт, уның хаҡында минән башҡа кешенән һорамаҫлыҡ булһын".*

*Пәғәмбәребеҙ әйтте: "Аллаһы Тәғәләгә иман килтерҙем, тип әйт тә шул биргән һүҙеңдә нык тор, тоғро бул", - тигән.*